*Календарь*

# Ғүмер, гүйә, күҙ асып йомған ара

***27 май — Бөтә Рәсәй китапханалар көнө***

***— Йыл артынан йылдар үткәне һиҙелмәй икән ул. Яңы ғына тормош юлына аяҡ баҫҡан, ғаилә ҡорған инек, ҡай арала балалар буй еткереп, башлы-күҙле булғанын да, хеҙмәт дәүеремдең елеп уҙып артта ҡалғанын да һиҙмәй ҡалғанмын. Татлы өләсәйлек хистәрен дә әле генә татығайным кеүек, инде ейән-ейәнсәрҙәрем дә, күҙ теймәһен, матур булып үҫеп килә, хаҡлы ялға сығыуыма ла дүрт йыл булып киткән. Ғүмер, әйтерһең дә, күҙ асып йомған ара, — ти хеҙмәт ветераны, әлекке китапханасы Сәкинә Рамаҙанова.***

Гөлнара КҮСӘРБАЕВА

Сәкинә Әлмөхәмәт ауылында алты балалы ғаиләлә үҫә. Мәктәпте бөткәс, Магнитогорскиҙа калибровка заводында эшләй. Ялға ҡайтҡанында китапханала эшләүсе әхирәте янына инеп йөрөгәнендә: «Һинең кеүек китапханасы булырға ине, рәхәтләнеп китаптар уҡыр инем», — тип ҡыҙыға. Тиҙҙән әхирәте район үҙәгенә эшкә күсә һәм ҡыҙының күптәнге хыялын белгән әсәһе, тимерҙә ҡыҙыуында һуға — китапхана мөдире Мәһира Ильясова менән һөйләшеп, уға эш урыны белешә. Шулай итеп Сәкинә Хәкимйән ҡыҙы 1979 йылда китапханаға килә. Әлбиттә, райондың үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре директоры алдында һынау тоторға тура килә, китапханасыға уҡыйһың, тигән шарт менән ала.

Һынатмай ул, ең һыҙғанып эшләй, ситтән тороп техникум тамамлай.

— Ул мәлдә китапхананан кеше өҙөлмәне, киске 9-ға тиклем эшләй инек. Халыҡ эштән һуң гәзит-журнал уҡырға, кроссворд сисергә, ололар телевизор ҡарарға килә торғайны. Телевизор өй һайын булмаған саҡ ине, — ти ул.

Ҡусмә китапхана менән яҙлы-көҙлө баҫыу ҡырына йөрөүен, механизаторҙарға уҡырға китаптар, ваҡытлы матбуғат баҫмаларын алып барыуын, бригада эшсәндәре өсөн махсус рәүештә «Боевой листок»тар сығарыуын яҡты хәтер менән иҫкә ала. Ул ғынамы, агитбригада менән йыш сығыш яһайҙар, мәҙәниәт бүлегенә ҡарағас һәм бер ҡыйыҡ аҫтында эшләгәс, клуб эшендә лә ҡайнарға тура килә. Ҡырҙан әртистәр килһә, уларҙы фатирға урынлаштырыу уға йөкмәтелә, урын таба алмағандарын, күңеле киң, алсаҡ әсәһенең урынын да, һыйын да бүлерен белгәнгә, барыһын да үҙҙәренә алып ҡайта.

Ауылдың йәмәғәт эштәрен китапханасыға йөкмәтеү яҙылмаған ҡанун. Сәкинә Хәкимйән ҡыҙы 20 йылдан ашыу ҡатын-ҡыҙар советын етәкләй, агитатор булып йөрөй, халыҡ иҫәбен алыуҙа ҡатнаша, 18 йыл һайлау комиссияһы рәйесе була. Бөтмәҫ йәмәғәт эштәре менән төп хеҙмәтен тигеҙ тарта, ғаилә ҡороп, донъя көтөргә өлгөрә, бер-бер артлы өс улға ғүмер бирә.

Әлмөхәмәттә китап уҡыусы халыҡ йәшәй. Китапхана фонды ла бик бай. Шуға ла ҙур булмаған ауыл башҡорт әҙәбиәтенә аҫыл улдар — тәнҡитсе, яҙыусы, шағир биргән, фән эшмәкәрҙәре үҫтергән. С. Х. Рамаҙановаға 80-се йылдар башында бер осор Рәмил Ҡол-Дәүләт менән бергә эшләргә тура килә. «Рәмил клуб мөдире булды. Китапханаға йыш инә, уҡырға китап ала торғайны. Шунан Өфөгә уҡырға инде. Ауылға ҡайтҡанында Рамаҙан апа Өмөтбаев менән осрашыу үткәреүҙәр хәтерҙә», — ти ул. Сәкинә Хәкимйән ҡыҙының китапханасы булып эшләгән 36 йыллыҡ хеҙмәте лайыҡлы баһаланған. 2001 йылда — «Һөнәре буйынса иң яҡшыһы», 2003 йылда «Йыл китапханасыһы» була. Китапхана селтәрҙәрендә оҙаҡ йылдар намыҫлы эшләгән өсөн Мәҙәниәт министрлығының Почет грамотаһы менән бүләкләнгән, районның юғары наградаһына лайыҡ булған. Йылдынйылы мәҙәниәт учреждениелары араһында уҙғарылған район конкурсында «Иң яҡшы мәҙәниәт учреждениеһы», «Иң яҡшы ауыл китапханаһы», «Китапхана эшен



яҡшы ойошторған өсөн», «Инициатива, ижади оҫталыҡ» номинацияларында еңеүсе тип табылған. Һайлау кампанияларына әҙерлек һәм ойошҡанлы үткәргән өсөн төбәк, үҙәк һайлау комиссияларының маҡтау ҡағыҙҙары менән билдәләнгән.

Сәкинә Рамаҙанованың халыҡ араһында ҡайнап йөрөгән тағы бер яратҡан шөғөлө бар. Ул да булһа — театр. Әлмөхәмәттә театр һөйөүсе һәүәскәрҙәрҙе туплап, иң беренсе пьесаны сәхнәгә ул үҙе ҡуя. М. Кәримдең «Ҡыҙ урлау»ын уйнайҙар. Ниндәй генә спектакль булмаһын, бер ҡасан да ролһеҙ ҡалмай. 2003 йылда «Театр яҙы» район фестивалендә «Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле» номинацияһында еңеүсе була.

Тормош иптәше Рәүеф Ғәбдрәүеф улы менән парлы ғүмер итеүҙәренә 37 йыл тулып уҙған. Совхоз заманында Әлмөхәмәт бригадаһында механик, управляющий, баш инженер булып эшләгән ағай, хужалыҡ тарҡалғаны бирле вахта менән ҡырҙа эшләй, хаҡлы ялға сығыуға тиклемге һуңғы айҙарын һанай. Ире эштә саҡта бөтә хужалыҡ эштәре, мал, баҡса ҡарау Сәкинә Хәкимйән ҡыҙының иңенә ята. Өйөндә лә ыҡсым тәртип булдырып, гөл-сәскәләргә күмелеп матур йәшәргә ярата. Баш ҡалала төпләнгән улдарына ҡулдан килгәнсә ярҙам итеүҙән, күстәнәскә мул итеп ауыл ризыҡтары ебәреүҙән әсәй, ҡәйнә, өләсәй булыуының мәғәнәһен таба. Радик, Заһир, Азат та алмашлап ялдарға ҡайтып, ярҙамлашып китә. Килендәре ҡәйнә тип өҙөлөп тора. «Хоҙай мине лә ҡыҙлы итте», — тип шөкөр ҡыла бәхетле әсәй. Ейән-ейәнсәрҙәре лә каникулға Әлмөхәмәткә киләбеҙ тип ашҡынып тора. Хеҙмәттә янып, сабып йөрөп йәшлек йылдарының һиҙҙермәйенсә үтеп киткәненә, 60 йәше ишек ҡаҡҡанына һис бошонмай ул. Бөгөнгөһө менән бәхетле.